Ҡаралды һәм ҡабул ителде:
Педагогик кәңәшмә ултырышы
Протокол № 1
«31» август 2023 йыл

Килешелде:
Уҡыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары
____ Л. Р. Хисаметдинова
« 31» август 2023 йыл

Раҫланды:
Т.Йосопов исемендәге республика лицей-интернат директоры бойороғо
« 31» август 2023 йыл
№_____

# Башҡорт әҙәбиәте буйынса
# X-XI кластар өсөн
# эш программаһы

Эш программаһын төҙөүселәр:
Баева Гүзәлиә Рид ҡыҙы,
Нуриева Әлфирә Йәмил ҡыҙы,
юғары категориялы башҡорт теле
һәм әҙәбиәте уҡытыусылары

Мәсәғүт
2023

## Аңлатма яҙыу

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән уқытыу туған(башҡорт)телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се кластар өсөн «Башҡорт әҙәбиәте» предметы буйынса белем биреү өлгө программалар нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүсеһе: Юлмөхәмәтов М. Б., Өфө: Китап, 2017. – 188 бит.

**Программаға дөйөм характеристика:**

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Дыуан районы республика лицей-интернаты дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Эш программаһы Дыуан районы республика лицей-интернатының 10-11-се кластары өсөн төҙөлгән. Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы әҙәбиәтте 69 сәғәт (10-11-се кластар) күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота. Дыуан районы республика лицей-интернатының уҡыу планына ярашлы 10-сы класта – 35 сәғәт, 11-се класта – 34 сәғәт бүленә.

Дәрестәрҙә XX быуат башҡорт әҙәбиәте,башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы, әҙәбиәт теорияһы менән танышыу күҙ уңында тотола. Тәрбиәләнеүселәрҙең аң-белемдәрен үҙләштереү, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә башҡорт әҙәбиәте бөтә предметтар менән (башҡорт теле, рус теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, тарих, йыр, рәсем, география) тығыҙ бәйләнештә тора һәм күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай.

**Программа буйынса башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙың маҡсаты һәм бурыстары**

10-11-се класта башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡытыу планында аҙнаға бер сәғәт ваҡыт бирелә. Был дәрестәрҙә тәрбиәләнеүселәрҙе XX быуат башҡорт әҙәбиәте менән таныштырыу, нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрен уҡыуға ихтыяж тыуҙырыу, дөрөҫ, грамоталы һөйләү һәм яҙыу күнекмәләренә өйрәтеү бурысы ҡуйыла. Программаға индерелгән әҙәби әҫәрҙәр тәрбиәләнеүселәрҙең аңлы уҡыу, яҙыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү, тормош тураһында белемдәрен киңәйтеү, идея-эстетик, әхлаҡ тәрбиәһе биреү, әҙәбиәткә һөйөү уятыу маҡсаттары менән бәйләп алып барыла:

- донъяға гуманистик ҡарашы, милли үҙаңы һәм дөйөм Рәсәй гражданлығы үҙаңы, патриотизм тойғоһона эйә булған, рухи үҫешкән шәхес формалаштырыу;
- шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен реализациялау өсөн кәрәк булған интеллектуаль һәм ижади һәләтлеген үҫтереү;
- уҡыусыларҙың башҡорт, рус һәм донъя әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштарын аңлауы, уларҙы уҡыу һәм анализлау, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерләүгә нигеҙләнеүен, художестволы форма һәм йөкмәтке берлеген, сәнғәттең тормош менән бәйле, тарихи булыуын аңлауы;
- художестволы тексты уҡыу, комментарий биреү, анализлау күнекмәләрен этап менән эҙмә-эҙлекле формалаштырыу;
- художестволы текста йәки башҡа теләһә ниндәй телмәрҙә һалынған мәғәнәләрҙе аңлау алгоритмдарына эйә булыу, үҙеңдең тексыңды төҙөү, уҡылған әҫәр тураһында шәхси баһаңды һәм фекереңде еткерә белеү;
- дөйөм уҡыу күнекмәләренә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә булыу (эшмәкәрлектең маҡсатын билдәләү, уны камиллаштырыу, библиографик эҙләнеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланыу һ.б.).

## Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

Уҡыу йылы аҙағында 10-11-се класс тәрбиәләнеүселәре түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейештәр:

- башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемларҙы аңлау;

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү, темаһын, идеяһын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү;

- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог, телмәр төҙөү, диалог алып барыу;

- художестволы әҫәрҙәрҙән сағыштырыу, йәнләндереү, эпитет кеүек һүрәтләү сараларын табыу;

- ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын белеү.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған эш төрҙәрен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар;
- иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2. Яҙма эштәрҙе тикшереү, баһалау.

Яҙма эштәрҙе тикшергәндә төп иғтибар пландың нисек төҙөлөүе, ундағы логик эҙмә-эҙлелек, план буйынса йөкмәткенең нисек асылыуына бирелә, һүҙҙәрҙең нисек ҡулланылыуы, шулай уҡ орфографик, пунктуацион, стилистик хаталар иҫәпкә алына. Эште тикшереп бөткәндән һуң, хаталарҙы классификациялап, күпселек уҡыусыларға хас типик хаталар иғтибарға алына һәм, хаталар өҫтөндә эш, иншаларҙы анализлау буйынса махсус дәрес үткәрелә. Анализ ваҡытында эштәргә дөйөм ҡылыҡһырлама бирелә.

**Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Программа йөкмәткеһе түбәндәге йүнәлештәрҙән тора:**

-әҙәбиәт фәне өлкәһендә белем биреү;
-универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү;
-шәхес булараҡ тейешле кешелек сифаттары тәрбиәләү.

**10-сы класс**

**Инеш.-1**
**Д. Юлтый ижады.** Шиғырҙары. Драмаһы. Романы-**5**.
**Ә. Вәлиди Туған ижады.** «Хәтирәләр» **-4.**
**М. Буранғолов ижады.** «Башҡорт туйы» драмаһы-**4.**
**Ғ. Хәйри ижады.** «Боролош» романы-**2.**
**Һ. Дәүләтшина ижады.** «Ырғыҙ» романы-**3.**
**Ғ.Сәләм ижады.** «Бала» поэмаһы-**1.**
**Р. Ниғмәти ижады.** Шиғырҙары. Поэмалары.-**2**
**Б.Бикбай ижады.** Драмалары. Повесы.-**3**
**З.Биишева ижады.** Романы. Драмаһы.-**3**
**Н. Нәжми ижады.** Шиғырҙары. Баллада, поэмаһы- **2**

**Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе**

**11-се класс**

**Инеш.-1**
**М. Кәрим ижады. -8**.
**Р. Ғарипов ижады. -4.**
**Ә. Хәкимов ижады. -2.**
**Ғ. Хөсәйенов ижады. -4.**
**Р. Бикбаев ижады. -2.**
**Н. Мусин ижады.-4.**
**А. Абдуллин ижады. .-2**
**Р. Солтангәрәев ижады.-1**
**Д. Бүләков ижады. -1**
**Х. Назар ижады. - 1**

## X класс өсөн тематик план ( Аҙнаһына 1дәрес, 34 сәғәт)

| № | Бүлектәр, сәғәттәр һаны, дәрес темалары |
|---|---|
| 1 | Инеш. XX быуат әҙәбиәте. Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы |
| | **Д. Юлтый ижады** |
| 2 | Д. Юлтыйҙың тормошо һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Шиғырҙары. |
| 3 | Д.Юлтый –драматург. «Ҡарағол» драмаһы |
| 4 | Д.Юлтый –драматург. «Ҡарағол» драмаһы |
| 5 | Д.Юлтый. «Ҡан» романы |
| 6 | Д. Юлтый. «Ҡан» романы |
| 7 | Т.Ү. «Д. Юлтый ижадында империалистик һуғышты фашлау» инша |
| | **Ә. Вәлиди Туған ижады** |
| 8 | Ә. Вәлиди Туған. Тормошо. Дәүләт эшмәкәрлеге. |
| 9 | Ә.Вәлиди – тарихсы, мемуарист |
| 10 | «Хәтирәләр» - автобиографик әҫәр |
| 11 | «Хәтирәләр» - автобиографик әҫәр |
| 12 | Кл.тыш. Ә. Вәлиди ижады буйынса |
| | **М. Буранғолов ижады** |
| 13 | М. Буранғолов. Тормошо. Ғилми эшмәкәрлеге. Сәсән. |
| 14 | М. Буранғолов – драматург. «Башҡорт туйы» әҫәре |
| 15 | М. Буранғолов – драматург. «Башҡорт туйы» әҫәре |
| 16 | Т.Ү. «Башҡорт туйы» драмаһында халыҡтың рухи азатлыҡ өсөн көрәш темаһының хәл ителеше. Инша |
| 17 | I ярты йыллыҡта үтелгәндәрҙе йомғаҡлау |
| | **Ғ. Хәйри ижады** |
| 18 | Ғ. Хәйри - тәүге ижад осоро. Шағир.Прозаик. «Боролош» романы |
| 19 | «Боролош» романы |
| | **Һ. Дәүләтшина ижады** |
| 20 | 30-сы йылдар әҙәбиәте. Һ. Дәүләтшина ижады |
| 21 | «Ырғыҙ» романы |
| 22 | «Ырғыҙ» романы |
| 23 | Кл.тыш. Һ. Дәүләтшина ижады буйынса |
| | **Ғ.Сәләм ижады** |
| 24 | Ғ.Сәләм. «Бала» поэмаһы |
| 25 | Т.ү. Ғ.Сәләм. «Бала» поэмаһы буйынса инша |
| | **Р. Ниғмәти ижады** |
| 26 | Б. В.һуғышы йылдарында башҡорт әҙәбиәте. Р.Ниғмәти «Үлтер, улым, фашисты» , «Һинең кәләшеңдең хаттары» |
| 27 | «Һаҡмар ҡыҙы» поэмаһы |
| | **Б.Бикбай ижады** |
| 28 | Б.Бикбай ижады. «Ҡарлуғас» драмаһы |
| 29 | «Салауат» драмаһы |
| 30 | «Аҡ сәскә» повесы |
| | **З.Биишева ижады** |
| 31 | З.Биишева ижады. «Яҡтыға» трилогияһы |
| 32 | З.Биишева ижады. «Яҡтыға» трилогияһы, «Тылсымлы ҡурай» әҫәре |
| | **Н. Нәжми ижады** |
| 33 | Н. Нәжми ижады |
| 34 | II ярты йыллыҡта үтелгәндәрҙе йомғаҡлау |

## XI класс өсөн тематик план(Аҙнаһына 1 дәрес, 32 сәғәт)

| № | Бүлектәр, сәғәттәр һаны, дәрес темалары |
|---|---|
| 1 | Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте. Хәҙерге поэзия |
| | **М.Кәрим ижады** |
| 2 | М.Кәрим тормошо. Тәүге осор, һуғыш йылдары ижады |
| 3 | Һуғыштан һуңғы ижады «Ҡараһыуҙар» поэмаһы |
| 4 | «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы |
| 5 | «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы |
| 6 | «Ай тотолған төндә» трагедияһы |
| 7 | «Салауат » трагедияһы |
| 8 | «Ташлама утты, Прометей» трагедияһы |
| 9 | Т.Ү. М.Кәрим ижады буйынса инша |
| | **Р.Ғарипов ижады** |
| 10 | Р.Ғарипов тормошо.Тәүге китабы.Шиғырҙар йыйынтығы. Хикәйәт һәм ҡобайырҙары |
| 11 | Лирик поэзияһының үҙенсәлектәре. |
| 12 | Поэма.Балладалар. Көндәлектәр. |
| 13 | Хәҙерге проза |
| | **Ә.Хәкимов ижады** |
| 14 | Ә.Хәкимов тормошо.Фәнни эшмәкәрлеге .Хикәйәләре |
| 15 | Романда яңы йүнәлеш. «Өйөрмә» романы |
| | **Ғ.Хөсәйенов ижады** |
| 16 | Ғ.Хөсәйенов тормошо, ғилми эшмәкәрлеге.«Тормош» китабы |
| 17 | «Батырҙар ҡиссаһы» әҫәре |
| 18 | «Ҡанлы 55» романы |
| 19 | Т.Ү.Инша «Ғ.Хөсәйенов парсалары- тормош дәреслеге». |
| 20 | Хәҙерге драматургия |
| 21 | Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме<br>Һәм тәнҡит |
| | **Р Бикбаев ижады** |
| 22 | Р.Бикбаев тормошо. Тәүге китап. “Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!” |
| 23 | “Халҡыма хат” поэмаһы.Зачет |
| | **Н.Мусин ижады** |
| 24 | Н.Мусин торм.Хикәйәләре “Зөһрә”,”Ауылым юлы”,”Кеше йылмая”пов. |
| 25 | “Шайтан ҡуласаһы”повесы |
| 26 | “Мәңгелек урман”романы |
| 27 | “Мәңгелек урман”романы |
| | **А.Абдуллин ижады** |
| 28 | Азат Абдуллин тормошо.Тәүге<br>Ижад осоро |
| 29 | «13-сө председатель» ,”Һуңғы уҙаман”драмалары |
| 30 | **Р.Солтангәрәев тормошо.** Хикәйәләре. Повестары. |
| 31 | **Д.Бүләковтың тормошо**.Хикәйәләре. “Упҡын ситендә бейеү”повесы, “Ғүмер бер генә” романы. |
| 32 | **Х.Назар тормошо** һәм ижады.“Шәмсыраҡ” поэмаһы. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Зачет. |